*Әлфиә КӘРИМОВА*

# Рәми Ғариповтың фәлсәфәүи лирикаһы

*Юҡ, сигенмә, егет, ҡынға тыҡма —*
*Хатта ҡылыс ҡылға ҡалғанда,*
*Йәшәгәс һин, йәшә яна-яна,*
*Йөрәк йәшәргә тип янғанда.*

*Р.Ғарипов*

Тыуған иленә, туған теленә, халҡына, тыуған ере тәбиғәтенә мөкиббән ғашиҡ кешеләр шағир күңелле булалар һәм ошо мөхәббәттән көс, сәм, дәрт алып ижад итәләр.

Рәми Ғарипов тормошта ла, ижадта ла янып йәшәй. Уның әҫәрҙәре ихласлығы, халыҡсанлығы, ғәзеллеге менән айырылып тора. Донъяға маңлай күҙе менән генә түгел, күңел күҙе менән дә ҡарай белгән шағир ҡыҫҡа ғына ваҡыт араурығында башҡорт поэзияһын әллә нисә баҫҡысҡа күтәргән аҫыл үрнәктәр ҡалдыра.

Рәми Йәғәфәр улы замандың йөрәк тибешен, ҡайғыһын һәм шатлығын, уңыштарын, еңеүҙәрен, фажиғәле ҡаршылыҡтарын дөрөҫ яҡтырта. Ярым дөрөҫлөккә, тормошҡа яраҡлашыу, ярамһаҡланыу, үҙ мәнфәғәттәрең менән генә йәшәү кеүек күренештәргә ҡаршы аяуһыҙ көрәшеү — шағирҙың ижад кредоһына, тормош принциптарына әүерелә:

Ҡилешмәҫкә килдем мин һиңә:
Йә һин мине юҡ итерһең ерҙән,
Йә баш эйерһең үҙең һин миңә!

*("Дон-Кихот")*

Беренсе йыйынтығы "Йүрүҙән"дән алып "Алырымҡош менән Бирмәмҡош"ҡа тиклем Рәми Ғарипов үҙ принциптарына тоғро ҡала. Хатта ижады башында уҡ "Туған тел" шиғыры менән милләтсе исемен алыу ҙа, тиҫтә йылдар әҫәрҙәренә битарафлыҡ та уның рухын һындырмай. Киреһенсә, ҡәләмен тағы ла үткерерәк итә, үҙен кеше, тормош, киләсәккә ҡарата фәлсәфәүи ҡарашлыға әйләндерә.

"Рәми Ғарипов — аҡыл эйәһе, Рәми Ғарипов — философ — халҡыбыҙҙа фәлсәфәүи фекер үҫешен өйрәнеүсе ғалимдар өсөн шағирҙың уйланыуҙары һәм күҙәтеүҙәре ғәйәт бай материал бирә"[1], — тип билдәләп үтә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев.

---

[1] *Р.Бикбаев.* Рәми. Шағир тураһында китап. — Өфө: Китап, 2007. — 616 бит. — 610-сы б.

Ысынлап та, шағирҙың һәр әҫәре фәлсәфәгә ҡоролған, тип ҡыйыу рәүештә әйтергә мөмкин. Мөхәббәт тураһында яҙамы, тәбиғәт күренешенә дан йырлаймы — ниндәй генә тематикаға мөрәжәғәт итмәһен, барлыҡ әҫәрҙәре төп бер идеяны асыуға ҡорола. Автор ысын мәғәнәһендә кеше исемен йөрөтөрҙәй йән эйәһенең сифаттарына баҫым яһай. Был проблеманы яҡтыртыу, тулыһынса асыу маҡсатында Рәми Ғарипов кеше һәм тәбиғәт, кеше һәм Тыуған ил, кеше һәм киләсәк, кеше һәм уның йәшәү мәғәнәһе, донъялағы урыны, үлем һәм үлемһеҙлек темаһына йыш мөрәжәғәт итә.

Әҙип тормошта актив мөнәсәбәтле, кешелекле, эшһөйәр, оптимист, гуманист, һөйә лә, көйә лә белгән, үҙ бәхетен ил бәхетенә, ил ҡайғыһына бәйләй белгән, халыҡ мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуйған кешене данлай, үҙ итә:

Ил бәхете менән бәхетле бул,  
Ил ҡайғыһы менән ҡайғылы,  
Иң ҙур бәхетһеҙлек булыр ине  
Шул ҡайғынан һиңә айырылыу.

Шағир үҙенең күп әҫәрҙәрендә тыуған еренең һәр биҙәген, үләнен, сәскәһен, ҡайындарын, баландарын — бар тәбиғәтен өҙөлөп һөйөүен сағылдыра:

Мин уларҙың моңон, һүҙен беләм,  
Үҙ телемдә улар һөйләшә,  
Иҫ киткес һеҙ, ҡунаҡ булған ерҙәр,  
Тик тыуған ер, йәшә, мең йәшә!

Уның фекеренсә, Ватанға һөйөү тыуған ауылыңа һөйөүҙән башлана:

Йөрәгем, тим, изге төйәгемде,  
Хаҡ яҙмышым шунда башланған,  
Шунда минең бәхет таңым атҡан,  
Шунда миңә Ватан башланған.

Автор Башҡортостан, Тыуған ил, башҡорт халҡы менән бер рәттән туған тел, башҡорт теле төшөнсәләренең ҙур мәғәнәгә эйә булыуын яҡшы аңлай. Рәми тел яҙмышы, тимәк, тыуыр көндәр, киләсәк быуын өсөн борсола. Туған телгә ҡарата ғәмһеҙ ҡарашлыларҙы уянырға әйҙәп оран һала:

Ниндәй хаҡыбыҙ бар оноторға  
Ҡанлы-данлы урау юлдарҙы?  
Ниңә ултырабыҙ  
Ҡәмәбеҙҙе  
Ағышына ҡуйып йылдарҙың?  
Күпме ҡорбан биреп,  
Ҡанды түгеп,  
Яулап алдыҡ ошо телде беҙ?  
Шул тел менән  
“Ирек” һүҙен әйттек,  
Гөлдәй иттек үлгән илде беҙ...  
*(“Тел тыуҙырған халҡым — бөйөк бер тел”)*

Данлы, ҡанлы көрәштәрҙә яуланған Тыуған ил менән ата-бабаларҙан аманат булып ҡалған туған телдең ҡәҙерен белергә саҡыра:

Телең барҙа, илең бар,
Илең барҙа, иркең бар,
Иркең барҙа, күркең бар,
Ерең, күгең — икең бар,
Утың, һыуың — дүртең бар.
*("Аманат")*

Р.Ғарипов киң, иркен доньяла бар телдәргә лә урын етерлек тигән фекер йөртә:

Бөтә даһи һөйләшерлек,
Бөтә ғашиҡ серләшерлек,
Тыңлап һүҙен көнләшерлек,
Аңлашырлыҡ уртаҡ тел
Бөтә телдә табылыр.
*("Тел")*

Айырым бер милләттәрҙең телдәрен үҙһенмәү, юҡҡа сығарырға теләүселәрҙе тарих биттәренә күҙ һалырға өгөтләй. Былай позицияның нимәгә килтереүен һыҙыҡ өҫтөнә ала:

Телде телдәр хушһынмаһа,
Артылмаҫлыҡ тау булыр,
Булмаҫ дуҫлыҡ, дау булыр,
Дау артынан яу булыр.
*("Тел")*

Әҙип донъяла бар нәмә бер-береһе менән бәйләнештә йәшәү концепцияһын үткәрә. Ошо бәйләнештәге бер сылбыр өҙөлһә лә, гармония юҡҡа сыға. Шуға күрә шағир төрлө ысулдар менән уҡыусыларына тел — милләт — ил өсмөйөшөнөң әһәмиәтен аңлатырға теләй.

Халыҡ яҙмышы, ил тарихы һәр саҡ хәрәкәттәге йәнле процесс. Тормош бер урында ғына тапанмай, алға атлай. Шулай булғас, унда ниндәйҙер үҙгәрештәр бара. Рәми Ғарипов ижады ысынбарлыҡтың ошо дөрөҫлөгөнә ауаздаш. Ул үткәндәргә күпме мөрәжәғәт итмәһен, шиғырҙары киләсәккә төбәлгән.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ, шағир киләсәк тураһында һүҙ йөрөткәндә, "киләсәккә ҡайтам" һүҙбәйләнешен ҡуллана:

— Киләсәгем! Ас һин ишегеңде!
— Кем тупһамда? Кемде күрәм мин?
— Танымайһыңмы әллә? Мин ҡайттым бит!..
*("Киләсәгем! Ас һин ишегеңде!")*

Эштән өйгә ҡайтҡандағы һымаҡ,
Киләсәккә ҡайтып йөрө һин.
*("Бер аяғың баҫһа бөгөнгөгә")*

Ғәҙәттә, "ҡайтам" һүҙе ғаилә, туғандар төшөнсәһе менән бәйле ҡулланыла. Уны кеше айырыуса йылылыҡ, дәрт менән ҡуллана. Яҙмыш уны төрлө һынауҙар аша үтергә, кәртәләр аша атларға мәжбүр итеүенә ҡарамаҫтан, Р.Ғарипов матур киләсәккә ышана, өмөт менән йәшәй, ҙур пландар ҡора, үҙендә көс, ышаныс тоя. Шағир фәлсәфәһе буйынса, кәйефең, күңел торошоң ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, иртәгәһе көн тураһында уйҙар, үҙең алдыңа

ҡуйған маҡсаттар алға әйҙәй, сәм һәм көс бирә. Ә инде өмөт, ышаныс, мөхәббәт йәшәтә:

Өмөт, мөхәббәт һәм ышаныс бит
Юғалмай ул, һүнмәй ваҡлыҡта...
*("Киләсәгем! Ас һин ишегеңде!")*

Үткәндәр. Әлеге ваҡыт. Килер көндәр. Ваҡыт бәйләнешендәге был төшөнсәләрҙең барыһы ла Рәми Ғариповҡа яҡын, ҡәҙерле. Шулай ҙа шәхестең яҙмышында хәл иткес роль уйнаусы көс — ул йәшәгән дәүер, бөгөнгөһө. Рәми Йәғәфәр улы күп кенә шиғырҙарында үҙен заман улы тип атаны:

Заманымдың бөтә тауыштарын
Заман улы булып һендерҙем.
*("Мин заманым менән ғорурланам")*

Ни тиклем ҡаршылыҡлы яҡтары күп булыуға, уға ҡарата аяуһыҙ булыуға ҡарамаҫтан, шағир йәшәгән дәүере менән ғорурлана, уны йондоҙло тип, үҙенең яҙмышын заманынан айырылғыһыҙ ҡараны:

Мин заманым менән ғорурланам,
Юҡ, был түгел һуҡыр ғорурлыҡ.
Бөтә ҡаршылығы, фажиғәһе
Йөрәгемдә алған урын юҡ.

Ошо һәм башҡа реаль тормош мәшәҡәттәрен, башҡалар ауыҙ асып әйтергә ҡурҡҡан проблемаларҙы аҡҡа төшөргән әҫәрҙәре өсөн тос фекерле дөрөҫлөк көрәшсеһе Рәми юғарыла ултырғандар тарафынан ҡыҫырыҡлыҡланыуы, иркен һулыш алырға ла мөмкинлеккә эйә булмау, эштән бушатылып, ғаиләһен тейешле кимәлдә ҡарау мөмкинлегенән мәхрүм ителә. Әлбиттә, был яман хәл-ваҡиғалар эҙһеҙ ҡалмай, бар кешелек тип фиҙа ҡылған шәхесте уйға һала. Әҙип үҙенә урын таба алмай йонсой:

Йоҡо мине бик үҙенеп етмәй,
Таштан ҡаты, ятһам, мендәрем.
*("Ни ғәләмәт, шашып йәшәйем мин")*

Йоҡоһоҙ үткәргән төндәрҙә фани донъяла үҙе тотҡан урын, йәшәү мәғәнәһе хаҡында фәлсәфә итә:

Әллә мин бик иртә тыуғанмыны,
Әллә инде һуңлап тыуғанмын?
Бер килмешәк төҫлө был донъяла
Иманымды йәндән ҡыуғанмын.
*("Әллә мин бик иртә тыуғанмыны")*

Илһеҙ дәрүиш инде — ят бер кеше —
Был донъяға килдем ваҡытһыҙ.
*("Башҡа донъянан килһәм дә")*

Шағир лирикаһының тағы бер үҙенсәлеге — үҙ яҙмышындағы иң ауыр саҡтарын да башҡаларҙан йәшермәй әҫәрҙәрендә сағылдырыуы:

Шул тиклем дә ниңә яңғыҙ һуң мин,
Ниңә яңғыҙ тулған ай һымаҡ.
Нур-наҙымды кемгә ҡояйым һуң,
Наҙға бит мин яҙҙай бай һымаҡ?..

Ҡайһы мәлдә ул фани донъяның йәмен дә юғалта төҫлө тойола:

Күңел үлгән, күңел төңөлгән дә,
Тере хистәр күптән күмелгән.
Бер ниндәй көн, бер ниндәй төн хатта
Серле уйҙар һалмай күңелгә...

Шағирҙың рухи донъяһы, кисерештәре ижадында сағылыш тапмай ҡалмай. Шикһеҙ, ошо юлдар тыуған ваҡытта Рәми Йәғәфәр улына сикһеҙ ауыр булғандыр. Был хаҡта шиғырҙарының йөкмәткеһе үк һөйләп тора. Психологтар дәлилләүенсә, кеше күңеле китек, кәйефе насар, тормошонда уңышһыҙлыҡтар, ҡайғы-хәсрәт килгән ваҡытта айырыуса фәлсәфәгә бирелеүсән була. Бындай саҡта йышыраҡ пессимистик характерҙағы фекерҙәр башҡа килә.

Ғөмүмән алғанда, борон-борондан ата-бабаларыбыҙҙы кешенең ғаләмдә тотҡан урыны, ғүмер, йәшәү мәғәнәһе, бәхет, үлем, үлемһеҙлек кеүек төшөнсәләр уйға һалған. Был мәңгелек һорауҙарға яуап эҙләү төрлө фекерҙәр тыуҙырған, ул фекерҙәр аҡҡа төшөрөлә килгән. Был хаҡта фәлсәфә ҡороу Р.Ғарипов лирикаһы өсөн дә сит күренеш түгел. Уйлап ҡараһаң, ғүмер, йәшәү, йәшәү мәғәнәһе, бәхет, үлем, үлемһеҙлек бер-береһе менән тығыҙ бәйләнеп, бер-береһен тултырып киләләр. Һәр кеше яҡты донъяға килә, йә бәхетле, йә бәхетһеҙ ғүмер кисерә, фани донъя менән хушлаша. Йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйлана, үлемһеҙлек тураһында хыяллана.

Рәми Йәғәфәр улы, алда билдәләп үтелгәнсә, тиҫтәләгән әҫәрҙәрен ошо тематикаға арнай. Тормошто ул йыш ҡына бәйге менән сағыштыра һәм был бәйгелә айырыуса намыҫлы, хаҡлыҡ һөйөүселәргә ауырға тура килә, ти:

Тормош — бәйге! Була шундай саҡтар:
Ярылырҙай була йөрәгең.
Ир намыҫлы булһаң был бәйгелә,
Ярһымай ҙа булмай, күрәһең.

*("Бәйге")*

Аңлашыла, донъя булғас, була төрлө хәлдәр, кешеләр ҙә бер-береһенән айырыла. "Ғүмер ҡыҫҡа! Донъя шундай матур"[1], шуға күрә уның ҡәҙерен белергә өндәй әҙип. Ғөмүмән, ғүмерҙе заяға үткәреүселәрҙе шәхес күңеле үҙһенмәй, ундайҙарҙы :

Эй, йылдар, неҙ бушҡа үтһәгеҙ,
Үтһәгеҙ һеҙ яныу-көйөүһеҙ,
Үтһәгеҙ һеҙ көйһөҙ-һөйөүһеҙ,
Мәғәнәһеҙ тау-таш өйөү һеҙ.

*("Эй, йылдар, һеҙ бушҡа үтһәгеҙ")*

тип иҫкәртә.

Әлбиттә, ғүмер кисергәндең хаталаныу ихтималлығын да ул таный. Ундайҙарҙы һис үртәләмәй, киреһенсә, йыуата:

Йәшәмәгән генә яңылышмаҫ,
Юҡ-бар уйҙар башҡа тулмаһын...

[1] *Р. Ғарипов.* Әҫәрҙәр. 3 томда. I том. Шиғырҙар, поэмалар. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1996. — 448 бит. — 185-се б.

Хаталар ҙа булыр тормошонда,
Тик тормошоң хата булмаһын!
*("Көнләшмәсе бик һаҡ кешеләрҙән")*

Шағирҙы айырым бер кеше яҙмышы ғына борсомай. Ул тотош халыҡ, улай ғына ла түгел, бар ғаләм яҙмышы хаҡында борсола. Барыһын да бәхетле итеп күрергә теләй.

Бәхет төшөнсәһенә килгәндә, Рәми Ғарипов "Бәхет" тигән шиғырында:

Нимә һуң ул бәхет?
Ҡыҫҡа бер һүҙ —
Ғүмер буйы төшмәй телеңдән.
Ғүмер буйы шуға ынтылаһың,
Ғүмер буйы йәнең-тәнеңдән
теләгәнең ошо —
бәхет ҡошо! —

тип яҙа. Уның фекеренсә, был төшөнсәне төрлө кеше төрлөсә күҙ алдына килтереүе тәбиғи, сөнки уның асылына төшөүҙә кешенең тәбиғәте, социаль статусы, билдәле мәлдәге хәл-әхүәле — һәм башҡа байтаҡ критерийҙар мөһим роль башҡара. Шуға күрә һыуһаған кеше өсөн — бер йотом һыу, һүҙ ҡәҙерен белеүсегә — китап бәхет сығанағы булып тора ла.

Бәхетһеҙ итеп бирәүҙе,
Бәхетле итһәм һине,
Ниндәй яҙмыш көткәнлеген,
Аһ, һылыу, белһәң ине! —

тип яҙҙы ул "Бәхетһеҙ итеп бирәүҙе" шиғырында.

Күренеүенсә, әҙип тормоштағы яҙылмаған ҡанундарҙы ла инҡар итмәй. Ысынлап та: "Бәхетле итеп бирәүҙе, Бәхетле булмай кеше!"

Шағир ижадында "бәхет" һүҙе йыш ҡына "мөхәббәт", "тыуған ил", "туған тел" һүҙҙәре менән тығыҙ бәйләнештә бирелә. Был йәһәттән ҡарағанда, автор бәхетле, сөнки уның туған теле, тыуған иле, халҡы, әйтер һүҙе, мөхәббәте бар.

Шулай ҙа ҡайһы бер шиғырҙарында ул бәхетте "һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ" тип тә атай һәм үҙенең яҙмышына ҡарата:

Бар ғүмерем минең — һине эҙләү
Бар ғүмерем — һине юғалтыу.
*("Бәхет — һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ")*

тигән фекер үткәрә.

Дөйөм ҡылыҡһырламаға килгәндә, автор билдәләүенсә, был донъяға килеү, йәшәү — үҙе оло бәхет.

Эйе, ғүмер итеү — оло бәхет, тик кеше ғүмере бик самалы. Мәңгелек менән сағыштырғанда, күҙ асып йомған ара ғына. Рәми Ғарипов һүҙҙәре менән әйткәндә:

Тибә-тибә лә бер туҡтай йөрәк,
Һанаулы шул йөрәк тибеше.
Оҙаҡ тормай фани был донъяла,
Китә кеше, ҡала тик эше.
*("Тибә-тибә лә бер туҡтай йөрәк")*

Кеше ғүмере һуң күпме генә?
Бөркөттөң бер ҡанат ҡағыуы!

*("Кеше ғүмере һуң күпме генә?")*

Яҡты донъяға берәү ҙә мәңгелеккә килмәй. Һәр яҙмыш үлем менән тамамлана. Ләкин автор фәлсәфә итеүе буйынса үлемдең дә төрлөһө була: мәғәнәлеһе, мәғәнәһеҙе, матуры, хурлыҡлыһы. Шуға күрә донъяла күпме йәшәүең түгел, ә нисек йәшәүең мөһим.

Үлемдә лә матурлыҡ бар,
Илем, тиеп үлһәң яуҙарҙа.
Матур — кеше,
Эшләп оло эшен,
Эш өҫтөндә үлем ауҙарһа.

*("Үлем")*

Миҫал итеп әҙип Маркс, Ленин, Галилей, Бруно кеүек шәхестәрҙең эшмәкәрлеген, тарихта ҡалдырған эҙҙәрен килтерә. Уларҙың ғүмерен киҫкән үлем тураһында автор "Кемде харап иттем, тиеп һаман Үҙ эшенән үҙе ояла"[1], — тип яҙа. Кешелек элек-электән үлем тураһында уйланған, унан ҡотолоу юлын эҙләгән, әле булһа был мәсьәлә актуаллеген юғалтмай. Һәр кеше аңлы тормошо дауамында үҙенең ғүмер ахыры тураһында уйлана, был тәбиғи процесҡа күрҡыбыраҡ ҡарай. Ә үлемгә ҡаршы дарыу уйлап сығарырға теләүселәр һаны йылдан-йыл ишәйә бара.

Үлемде еңеү үлемһеҙлек төшөнсәһен тыуҙыра. Нимә ул үлемһеҙлек? Кешелекте үлемһеҙ итеүҙә мәғәнә бармы?

Рәми Йәғәфәр улы үлемһеҙлекте айырым бер әҙәмдең мәңге йәшәүендә түгел, ә кешелектең, уға йәшәргә мөмкинлек биргән тәбиғәттең мәңгелегендә, киләсәк быуында, балаларҙа күрә. Ер йөҙөндә мөхәббәт тигән хис яралғандан алып үлемгә урын юҡ, тип фекер йөрөтә шағир:

Үлем үлде! Беҙҙән һуң да ерҙә
Үҫер, емеш бирер гөлөбөҙ.
Йәншишмәкәй ул Мөхәббәт икән,
Йәншишмәнән эскән — Үлемһеҙ!

*("Йәншишмә")*

Ул тормошта һәр нәмә бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә булыу концепцияһына таяна. "Үлән тауышы" исемле шиғырында үлән һәм ысыҡ образдары аша автор мәңгелек өсөн береһен икенсеһе тулыландырыу, йәшәргә көс биреү мотлаҡ тигән идеяны пропагандалай:

Үлмәм әле,
Үлмәм!
Мин — Үлән.
Сыҡ әле,
Сыҡ,
Һин — Ысыҡ!

---

[1] *Р.Ғарипов*. Әҫәрҙәр. 3 томда. I том. Шиғырҙар, поэмалар. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1996. — 448 бит. — 183-сө б.

Ғүмере буйы яҙмыш әҙерләгән хәтәр һынауҙар аша үтергә тура килгән Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов йөрәк, ғүмер, үлем темаларына йыш мөрәжәғәт итә. Замандаштары тештәрен ҡыҫып түҙергә мәжбүр булғанда, ул ялғанлыҡҡа баш эймәй, дәүер ҡанундарына ҡаршы көрәшкә сыға. Ҡайһы мәлдәрҙә үҙен яу яланында яңғыҙ яугир итеп тойған осраҡтары ла булмай түгел. Бындай саҡтарҙа күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп китеү ҙә мөмкин, әлбиттә. Шундай мәлдәрҙә күңел торошон сағылдырып, "... ерҙә мин тик бер үлән!.."[1] тигән һығымтаға килә автор һәм:

Үлгәне бар яңғыҙ тереләрҙең,
Һаман тере бергә үләндәр...
Шул берлектә йәне бөрөләрҙең:
Үлән менән тере үләндәр!..
Яңғыҙ булһа улар, йәшәү яулап,
Ҡаплай алмаҫ ине ер шарын,
Атлай алмаҫ ине донъя буйлап,
Йондоҙҙарға сөйөп баштарын..., —

*("Үләндәр")*

тип, кешеләрҙе матур тормош төҙөү, яҡты киләсәк өсөн көрәштә берҙәм булырға әйҙәй.

Конкрет кешегә ҡарата үлемһеҙлек төшөнсәһен уның тормошта ҡылған эшмәкәрлеге менән берлектә ҡараған (үҙе үлгәс тә изге эштәре халыҡ теленән төшмәй икән, тимәк, кеше үлемһеҙ). Бар булмышын, ғүмерен, ижадын кешелеккә арнаған, йәшәү мәғәнәһен дөрөҫлөк, гәҙеллек, яуаплылыҡ, кешелеклек, мөхәббәт кеүек изге төшөнсәләр хөкөм һөргән, тыуған илендә үҙ теленең, иленең ҡәҙерен белеп, яратып көн күрергә мөмкинлек булған киләсәктә күргән шағир хаҡында үлемһеҙ, тип, һис шикһеҙ, раҫлай алабыҙ.

"Ҡем белә, башҡа ерлектә тыуһа, башҡа заманда йәшәһә, халҡым, илем, телем, тип ул тиклем өҙгөләнмәһә, Р.Ғарипов тормош фәлсәфәһе, донъяның асылы хаҡында тәрәнерәк уйланыр, уның лирикаһында йәшәү һәм үлем, дөрөҫлөк һәм ялған, тоғролоҡ һәм хыянат, мөхәббәт һәм нәфрәт һымаҡ мәңгелек төшөнсәләр тураһында образлы фекерҙәр тағы ла күберәк булыр ине"[2], — тип билдәләп үтә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев.

Ысынлап та, уның әйтер һүҙе күп ине. Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә, Р.Бикбаев билдәләп үткәнсә, ҡатмарлы заманда тыуып, ижад итергә тура килгән шағир әҙәбиәттең төрлө өлкәһендә (тәржемә, поэзия, тәнҡит һ.б.) үҙ күперҙәрен һалып ҡалдыра ала.

Рәми рухы халҡым күңелендә мәңгелек һәйкәл булып йәшәй һәм йәшәйәсәк!

---

[1] *Р.Ғарипов.* Әҫәрҙәр. 3 томда. I том. Шиғырҙар, поэмалар. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1996. — 448 бит. — 163-сө б.[2] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. I том — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. — 470-се б.